*Пиши о том к чему лежит душа...*
**Акмулла**

# Ынйылар

**Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия – интернаты гәзите № 3 (103), декабрь 2018 йыл**

# *Байрам менән, дуҫтар!*



*Ҡәҙерле гимназистар, хөрмәтле уҡытыусылар, тәрбиәселәр һәм ата - әсәләр!*

*Һеҙҙе Яңы 2018 йыл менән ысын күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ!*

*Ҡәҙерле уҡытыусылар, тәрбиәселәр! Яңы уҡыу йылында һеҙгә ҡоростай сәләмәтлек, ғаилә бәхете, ижади уңыштар теләйбеҙ!*

*Уҡыусыларға уҡыуҙарында гел “4”, ”5” билдәләренә уҡыуҙарын, шулай уҡ таҙалыҡ, уңыштар теләйбеҙ.*

*Ә инде хөрмәтле ата-әсәләргә балаларының игелектәрен күреп, ҡыуанып йәшәргә яҙһын! Байрам менән һеҙҙе!*

## Яңы йыл!

Яңы йылды балалар
Шыршыға биҙәктәр элеп,
Ҡыуанып көтөп ала,
Концерт ҡуя һәр бала.

Ҡыш бабайҙы һағынып
Күргәс тә ҡыуаналар,
Ул биргән бүләктәрҙе
Шатланышып алалар.
***Миһранова Лилиә,***
***2-се г класы уҡыусыһы.***

### *Яңы йыл менән ҡотлайым!*

Мин бөтәһен дә ҡотлайым
Эт йылы менән.
Һәммәгеҙгә лә әйтәм:
«Яңы йыл менән!».
Һалҡын ҡыш килде беҙгә!
Байрамса кәйеф һеҙгә,
Уңыштар ғына теләйем
Дуҫҡайым һиңә!
Яңы йыл һеҙгә
Тик шатлыҡтар килтерһен!
Һәр берегеҙҙең
Теләктәре үтәлһен!
***Йосопова Радмила,***
***5-се б класы уҡыусыһы.***

## Һалҡын ҡыш беҙгә килә!





Ҡар бурандар уйнатып
Һалҡын ҡыш беҙгә килә.
Ел атында һыҙғырып
Ҡыш бабай ҡырҙа елә.

Бер көндө мин уянып тышҡа сыҡтым, унда ябалаҡлап ҡар яуа ине. Ҡар бөртөктәре мең-мең йондоҙ һымаҡ ялтырап күҙгә сағылды. Аяҡ аҫтында, ағастарҙа ҡайҙа ҡарама мамыҡ кеүек йомшаҡ ҡар ята. Был матур һүрәтте күреп, минең күңелемдә хис – тойғолар уянды. Ҡыш үҙенең мөғжизәле тәбиғәте менән мине йәнә әсир итте. Мин шул мөғжизәгә һоҡланып, хисләнеп яй ғына алға атланым. Ҡаршыға осраған кешеләр ҙә ҡыш килеүенә бик шат икәндәрен аңланым. Улар ҙа был матурлыҡҡа таң ҡалғандарҙыр тип уйлайым. Сөнки, йөҙҙәрендә тик йылмайыу, бәхет күрҙем.

Быйыл ҡыш бик һуңлап килде. Шуға күрә ул түҙемһеҙлек менән көтөп алынған миҙгел. Тәбиғәттең ап-аҡ күлдәген кейгән ваҡытын бик һағындырған икән. Һәм шуға ла ошо сихри донъяла мин үҙемде бәхетле итеп тоям.

***Иҙиәтуллина Сулпан, 5 – се б класы уҡыусыһы.***

# Серле ҡыш



**_Яңы йыл_**

Килеп етте Яңы йыл!
Шатлыҡ, ҡыуаныс бөгөн.
Эт йылы менән быйыл
Барыһын да ҡотлайбыҙ!

Ҡыш бабай килеп етер,
Бүләктәр биреп китер.
Ҡарһылыу шатландырыр,
Беҙгә ҡыуаныс бирер.

Бергәләшеп йырларбыҙ,
Шиғырҙар ҙа һөйләрбеҙ,
Уйындар ҙа уйнарбыҙ,
Бүләктәр ҙә алырбыҙ.

Йырҙарыбыҙ бик матур
Яңы йыл тураһында.
Шыршыбыҙ ҙа бик матур
Байрамса ул булғанға.

Шатланабыҙ, көләбеҙ,
Байрам бит бөгөн беҙгә.
Шундай матур байрамдар
Бөтмәһен мәңге беҙҙә!

***Миһранова Юлиә,***
***5-се б класы уҡыусыһы.***




Тәүге ҡар. Тәүге ҡар тиҙ генә ергә ятманы. Бер нисә тапҡыр ябалаҡлап ҡар яуғандан һуң артынан иретеп тә алды. Күп кенә шулай ҡабатланғандан һуң тыуған еребеҙгә йомшаҡ, саф, ап-аҡ ҡар ятты. Яландар, ҡырҙар аҡ юрғанға, ағастар аҡ шәлгә бөркәнде. Мин еңелсә кейенеп ҡышҡы тәбиғәтте күҙәтергә сығып киттем. Урман, яландар, ауылдар аша еңел саңғыла шыуып барам. Бөтә тирә-йүн әллә йоҡлай, әллә моңһоу уйға сумған.

Керпегемә нимәлер килеп ҡунды, ҡараһам ябалаҡлап талғын елгә ҡар бөртөктәре бейей башлаған. Уларҙың был хәрәкәте башҡорт та, татар ҙа бейеүенә оҡшамаған, ә талғын, әкрен вальсҡа оҡшаған. Урман эргәһенә еткәс, ағастарға бәҫ ҡунғаны һиҙелде. Әйтерһең, бөтә ергә алтын-көмөш һибелгән. Ағас төптәрендә төрлө йәнлек эҙҙәре күренә. Улар ҙа ҡыш көнө тик кенә ятмайҙар икән.

Серле лә ул ҡыш. Ҡолағыма сыр-сыу тауыштар яңғырағас, артыма әйләнеп ҡараһам, бәләкәсенән алып олоһона тиклем, балалар пыр туҙып шаяралар. Ауылдың үр яғында тау башында мәктәп балҡып ултыра. Уҡыусылар гөж килеп уҡыуҙан ҡайтып киләләр. Кескенәләре тауҙа сана, саңғы шыуалар. Ә икенсе осонда бәләкәй генә йылға, уның туңған ерендә балалар коньки шыуалар. Ошо миҙгелдә иң ҙур, күңелле, ҡыҙыҡлы, матур байрамдарҙың береһе - Яңы йылды байрам итәбеҙ.

Йыл буйы көткән көн дә килеп етте, ниндәй шатлыҡ, күңелдәр көр ул көндө. 31 декабрь бер аҙ моңһоу ҙа һәм бер аҙ күңелле лә көн. Моңһоу, сөнки, үткән этәс йылы үтеп китә. Ә күңеллеһе шунда яңы эт йылы аяҡ баҫа, яңы уңыштар,күңелле һәм ҡыҙыҡ, яңы ваҡиғалар һәм башҡа ҡыуаныслы көндәр көтәләр.

Ә йәшел,ҡупшы шыршы Яңы йыл символы булып тора. Уны матур уйынсыҡтар, ялтырауыҡтар менән биҙәйҙәр. Мәктәптә, клубта үткән кисә-сараларҙа уның эргәһендә концерттар ҡуялар, бейейҙәр һәм йырлайҙар.

Байрамыбыҙҙың ҡыҙыу мәлендә бөтә ҡунаҡтар Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙы көтөп алалар. Сөнки, улар беҙҙең кисәбеҙҙең төп ҡунаҡтары булып торалар. Улар балаларға күстәнәстәр тараталар, уҡыусылар ҙа, килгән ҡунаҡтар ҙа бүләкһеҙ ҡалмайҙар. Улар менән уйнап-йырлап күңел асалар.

Минең күңелемдә ҡыш йыл миҙгеле һәр ваҡытта ла тик яҡшы уйҙар ҡалдыра, сөнки берҙән онотолмаҫ байрам, ә икенсенән ҡышҡы каникулдар.

***Яңы йыл менән, дуҫтар!!!***

***Вәлиәхмәтова Динара, 7-се б класы уҡыусыһы.***

# Шыршы байрамы тарихынан

Яңы йыл ҡаршылағанда шыршы биҙәп ултыртыу йолаһы немецтарҙан килә. Мәңге йәшел был ағасты мәңгелек символы тип танып, улар 1521 йылда Селест ҡалаһы майҙанында тәүге шыршыны биҙәй. Шыршыны ялтырауыҡ эре шарҙар менән биҙәүҙе лә немецтар башлай. Англия короленың немец туғандары был йоланы ул илгә лә алып бара.

Байрам һайын яңы ҡотлауҙар уйлап ултырып ялҡҡан бер чиновник шул ваҡытта Яңы йыл открыткаһын уйлап таба. Тап шул открыткаларҙа тәүләп Санта Клаус образы тыуа ла инде. Әйткәндәй, йыл ҡаршылаганда бер-беренде ҡотлау йолаһы боронғо Вавилонда һәм Римдә лә булган. Шулай уҡ яңы йыл алдынан барлыҡ бурыстарҙан ҡотолоу йолаһы ла уларҙан бар донъяға күскән.

Ә Рәсәйҙә тәүге Яңы йыл шыршыһы 1852 йылда Санкт-Петербургтың хәҙерге Мәскәү вокзалы бинаһында ҡабына. Был йоланы Рәсәй буйлап таратыу ҙа бик ҙур ауырлыҡ менән бара.

1927 йылда, Совет илендә дингә ҡаршы көрәш башланғас, Рождество рәсми байрам булыуҙан туҡтай һәм шыршы ла “дини иҫкелек ҡалдығы» тип иглан ителә. Әммә 1935 йылда Сталиндың әмере буйынса балалар өсөн шыршы байрамдарын яңынан үткәрә башлайҙар. 1941 йылдың декаберендә ул ваҡыттағы ил старостаһы Михаил Калинин халыҡҡа мөрәжәғәт менән сығыш яһап, 1 ғинуарҙы Яңы йыл байрамы – ял көнө тип иглан итә. Тимәк, беҙгә лә шыршы байрамы тик һуғыш алдынан ғына килеп еткәндер тип фаразларға кәрәк. Ул балалар өсөн уйын сараһы булараҡ ҡына ҡабул ителә, ә иң ҡыҙығы – Ҡыш бабай бүләге, ул замандарҙа үтә дефицит булган тәм-том таратыу була.

Яңы йылда битлек - маскалар кейеп йөрөү мәжүсилек замандарынан уҡ ҡалған. Был көндә был һәм «теге» донъя менән бәйләнеш үтә яҡыная һәм шуга, шау-гөр килеп, улар булып кейенеп, ен-шайтандарҙы өркөтөү мотлаҡ тип һаналған. Тап шул замандан төрлө йәндәрҙе, шайтандарҙы яныңа саҡырып, уларҙан киләсәк яҙмышыңды юрау йолаһы ҡалган. Иблес-шайтандар менән бәйле булыу сәбәпле, күрәҙәселекте Ислам дине хупламай.

*“Аманат” журналынан.*

### Ҡыш бабай

Ҡыш бабай - күңелле бабай,
Кил инде тиҙрәк беҙгә.
Яңы йыл йырын йырларбыҙ
Икәүләп бергә.

Ҡыш бабайым кил тиҙрәк,
Һағындым һине бигрәк.
Һинһеҙ бында бик күңелһеҙ,
Ашҡынып көтә күңел.

***Нәсретдинова Алһыу,***
***6-сы б класы уҡыусыһы.***







### Шыршы алып ҡайттыҡ

Беҙ урманға барып ҡайттыҡ.
Йәшел шыршы алып ҡайттыҡ.
Беҙҙең матур, ҡупшы шыршы,
Әсәкәйем сыҡты ҡаршы.
Беҙ шыршыны биҙәкләйбеҙ,
Матур йырҙарҙы көйләйбеҙ.
Уйынсаҡтар алып сыҡтыҡ,
Гирляндалар элеп ҡуйҙыҡ.
Беҙҙең шыршы бик матур,
Килегеҙ һеҙ күрергә.
Беҙҙең шыршыны күргәнгә,
Үкенмәҫһеҙ һеҙ берҙә!

***Ҡасимова Зилиә,***
***11-се а класы уҡыусыһы.***

### Минең ялтыр шыршым!

Яңы йылда беҙ ултырттыҡ
Ялтыр яһалма шыршы.
Йыл буйына өйҙә ятты
Көтөп алды ул ҡышты.

Шыршыларҙы һеҙ ҡырҡмағыҙ,
Үҫһен улар урманда.
Улар бик ҙур, матур була,
Шыршылар күп булғанда.

***Ғәлиева Динә,***
***2 –се а класы уҡыусыһы.***

### Ауылым

Күркәм Ҡасым ауылымды
Бик күптәр яҡшы белмәй.
Һауаһы саф, тауҙарға бай,
Урман-яландар гөлдәй.

Күккә ашҡан тауҙары,
Таҙа шишмә, йылғаһы.
Урмандары агасҡа бай,
Өҙҙөрөп һайрай ҡоштары.

***Иҙиәтуллина Сулпан,***
***5-се б класы уҡыусыһы.***

# Гимназиям тормошонан

### *Веселится детвора*

Ура! Ура!
Веселится детвора
Снова к нам зима пришла,
Зной и холод принесла.
Скоро, скоро Новый Год,
Развлекается народ.
Он хозяин в этот год.
Много к нам гостей придёт
Дед Мороз, лиса и волк
Побежали в хоровод.
Снег на улице идёт,
Новый год сейчас придет!
***Ким Елизавета,***
***ученица 5 б класса.***



### *Әсәйем*

Ҡосаҡлап, наҙлап үпкән,
Көн дә иртән сәс үргән,
Әсәкәйем бер-генәм
Беҙгә ғүмер, йән биргән.

Теләйем һиңә
Иң яҡты юлдар.
Наҙлы булһындар
Гел һинең ҡулдар.
***Вәлиәхмәтова Динара,***
***7-се б класы уҡыусыһы.***



### *Уйлап карғыҙ әле!*

Йомшаҡ ҡына аҡ ҡына,
Сана шыуыр саҡ ҡына,
Урамда оҙаҡ йөрөһән,
Битте семетә саҡ ҡына.

☼☼☼

Һыуыҡлығы көйҙөрә,
Бейәләйҙәр кейҙерә.
Тик ятмай ул гел генә.
Исеме икән нимә?

☼☼☼

Аҡ бабай, аҡ бабай,
Аҡ туныңды ҡаҡ, бабай.

☼☼☼

Осоп китә, йөҙөп китә,
Ваҡыт еткәс, иреп бөтә.

***Иванова Екатерина,***
***5-се б класы уҡыусыһы.***

### *Поздравляем победителей и призеров всероссийской олимпиады школьников 2017-2018 учебного года!*

***Призёры***

| № | Ф.И | Предмет | Класс | Руковадитель |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Муратова Адэля | Литература | 9 | Мухаметзянова Р.А. |
| 2 | Исламов Рамил | Астрономия | 10 | Талхина З.Я . |
| 3 | Борисова Татьяна | ОБЖ | 10 | Азнабаев А.А. |
| 4 | Багаутдинов Багаут-дин | Математика | 7 | Идрисова А.Г. |
| 5 | Ильясов Рустэм | Обществознание | 8 | Мирясова Д.Р. |
| 6 | Макеев Александр | Обществознание | 7 | Мирясова Д.Р. |
| 7 | Низамутдинова Ди-ля | Биология | 9 | Лутфуллина А.С . |
| 8 | Бигалеева Айгиза | Биология | 10 | Лутфуллина А.С. |
| 9 | Москвина Алина | Технология | 7 | Семенова Р.Р. |
| 10 | Макеев Александр | История | 7 | Курбанова Г.М. |

***Победители по башкирскому языку:***

| № | ФИ | Класс | Руководитель |
|---|---|---|---|
| 1 | Иванова Оксана | 11 | Мавлиева Т.Г. |
| 2 | Райманова Илюза | 10 | Исламова З.Х. |
| 3 | Гайнетдинова Гульдар | 9 | Мавлиева Т.Г. |
| 4 | Мавлиева Элина | 8 | Мавлиева Т.Г. |

***Победитель***

Низамутдинова Диля – экология 9 класс, руковадитель: Лутфуллина А.С.

Результаты муниципального этапа олимпиады «Психология без границ»:

1.Федулова Анастасия – победитель
2.Хусаинова Рената - лауреат
3.Садыкова Эльнара – лауреат
4.Ртищева Мелена - лауреат
5.Петрова Александра – лауреат

1.Савельева Е.А. – Всероссийский конкурс «Доброволец России 2017» номинация «Серебряное волонтерство».

***Стипендиаты:***

1.Шаймуратов Оскар стал стипендиатом Главы Республики Башкортостан для особо одаренных учащихся 2017-2018 учебном году.

2.Зайнуллина Диана стала стипендиатом Главы Администрации муниципального района Белебеевский район РБ. ***Ефремова Алиса, ученица 9 в класса.***

«Ынйылар»
Учредитель-Администрация МАОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебея РБ
Выходит с 1 сентября 2005 года.

Главный редактор З.Х.Исламова
Ответственная за выпуск З.Х. Исламова .
Верстка З.Х. Исламова
Редакция может не разделять мнение авторов статей.

Адрес редакции: 452000, РФ РБ, г. Белебей, ул. Морозова, 2, каб. №36
Телефон: 4-41-70, 3-21-12,
Email: Bel_bg@mail.ru
www.Bel-bgi.ucoz.ru

Газета выходит один раз в месяц в редакции МАОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебея РБ
Распространяется бесплатно.
Тираж 40 экз. 16. 01. 2018 г. 9. 00 ч.